БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 432-435

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.081

УДК 81.373.21:811.512.141

**Ф. Б. Юнысова**

*Ордена «Знак Почета» Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*проспект Октября, 71, Уфа, 450054, Россия*
*E-mail: firdaus23@bk.ru*

# З. БИИШЕВАНЫҢ ПУБЛИЦИСТИК ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

В данной статье вкратце анализированы очерки, публицистические статьи и воспоминания известной башкирской писательницы, поэтессы и драматурга Зайнаб Биишевой, которая внесла весомый вклад в башкирскую литературу и драматургию. Данные произведения автора написаны в разные годы и в них отражены важные жизненные ситуации своего времени и образ современника.

*Ключевые слова:* башкирская литература, жанр, публицистика, Зайнаб Биишева.

Күренекле яҙыусы, шағирә, драматург Зәйнәб Биишева – күп яҡлы таланты менән милләттең рухи үҫешенә ҙур өлөш индергән һәм республикала ғына түгел, сит илдәрҙә лә киң танылған әҙиптәрҙең береһе.

Проза жанрының бөтә төрҙәрендә лә күп һәм уңышлы ижад итеп, ысын мәғәнәһендә класик өлгөләр биреүгә өлгәшә. Ижадының тәүге осоронда ул хикәйәләр, нәҫерҙәр, әкиәттәр, очерктар яҙа һәм даими рәүештә матбуғатта көнүҙәк темаларға публицистик мәҡәләләре менән сығыш яһай. Әйткәндәй, уның публицистик мәҡәләләре 1946 йылда “Ҡыҙыл Башҡортостан” газетаһында баҫыла башлай.

1973 йылда авторҙың “Үткәндәргә бер әйләнеп” исемле йыйынтығы нәшер ителә һәм төрлө йылдарҙа, төрлө темаларға яҙылып, үҙ ваҡытында газета һәм журналдарҙа баҫылған очерктары, публицистик мәҡәләләре, иҫтәлектәре туплана.

Күпселек яҙмалар авторҙың “мин”е исеменән алып барыла һәм был тәбиғи ҙә, сөнки улар автобиографик характерҙа яҙылған. Уның шәхси күҙәтеүҙәре, образлы сағыштырыуҙары һәм төплө анализдары дөйөмләштерелеп, юғары художестволылыҡҡа еткерелә. Бында авторҙың донъяуи күҙәтеүҙәр офоғо ни тиклем киң булыуын, халыҡсан тел байлығын, үҙенә генә хас яҙыу стилен барлығын асыҡ күрергә мөмкин.

“Йөрәгемдә – Ленин” тигән иҫтәлегендә, мәҫәлән, Октябрь революцияһын яланаяҡ ҡаршылаған кескәй ҡыҙҙың яҙмышы ҡырҡа үҙгәрә, автор әйткәнсә, “гүйә упҡындан күтәреп алып аяҡҡа баҫтырҙы, нурлы мәктәп донъяһына алып инде”. “Ленин” тигән һүҙҙе лә тәү тапҡыр ишетә: Ленин – иҙелгән, кәмһетелгәндәрҙең яҡлаусыһы. Ленин – дуҫлыҡ, туғанлыҡ, ғәҙеллек, тоғролоҡ һаҡсыһы. Был шәхес уның йөрәгенең иң ҡәҙерле, иң ҡиммәтле ҡоматрҡылары ғына һаҡлана торған түрендә ҡояш булып, терелткес нур бөркөп йәшәй, йәйғор булып ғүмер юлын биҙәй, ынйы-мәрйен саҫҡылары булып күңел хазиналарына бөтмәҫ-төкәнмәҫ матурлыҡ өҫтәй, йә иһә мең-мең юха йыландарҙың башын ҡыйыусы, бер

ҡылыс һелтәүҙә батша һарайҙарының көлөн күккә осороусы, ҡараңғы зиндандарҙа ыҙа сиккән һылыу-һылыу ҡыҙҙарҙы яҡты донъяға сығарыусы еңелмәҫ үлмәҫ әкәиәт батырына әйләнә.

Ун алты-ун ете йәштәрҙә инде автор иң әүҙем, йәш, ярһыу комсомолкаларының береһе булып китә. Башҡорт халыҡ йорто Ырымбурҙағы Карауанһарайҙа яңы асылған Башҡорт педагогия техникумында уҡып йөрөгән сағында ла Лениндың азатлыҡ, туғанлыҡ, ғәҙеллек тигән изге идеалары менән рухланып йәшәй һәм рәхмәтле, бурыслы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. “Яҡтыға” трилогияһын яҙған ваҡытта ла автор: “Был әҫәрҙәрем… минең тиҫтәләрсә йылдар күңелемдә һаҡлап килгән иң мөҡәддәс теләгем ине. Һәм мин… ошо изге теләккә ирештем. Мине, ябай башҡорт ҡыҙын, урамдан алып кеше иткән, яҙыусы иткән бөйөк Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыу көндәренә буш ҡул менән килмәүем өсөн үҙемде сикһеҙ бәхетле һанайым” ти ул [Биишева, 1973, 7].

“Ҡыҙыл галстуклы кеше” иҫтәлегендә автор ҡыҙыл галстуклы кешеләрҙе, пионерҙарҙы иң яратҡан кешеләренә һанай. Йәшенән уҙыу сәбәпле пионер сафына инә алмай, әммә ҡыҙыл галстук тағып, урамдарҙа хужаларса киң баҫып йөрөү теләгенә ирешә. Башҡорт педагогия техникумына уҡырға ингәс тә иң тәүге эшен пионер важатыйы булыуҙан башлай. Техникумда уҡыған йылдарҙа йәйге каникул осорҙарында үҙенең тыуған ауылы Туйымбәттә пионер ячейкаһы ойоштороуҙа актив ҡатнаша, техникум тамамлап, Баймаҡ районы Билал ауылына барғас, комсомол һәм пионер эшен юлға һалып ебәреүҙә ең һыҙғанып эшләй. Берҙән – бер уҡытыусы буларак көндөҙ дүрт класта уҡытһа, кискеһен өлкәндәрҙе уҡыу-яҙыуға өйрәтә. Ауыр йылдар булыуына ҡарамаҫтан, был осор авторға йәшлегенең иң бәхетле, онотолмаҫ иҫтәлектәренең береһе булып ҡала.

“Боевой иптәш, иң тоғро дуҫ” исемле иҫтәлектә, ауылдан яңы ғына килгән йәш ҡыҙҙың беренсе тапҡыр китапханаға килеүе һәм тәүге тапҡыр “Башҡортостан” газетаһын алып уҡыуы тасуирлана. “Башҡортостандың ҡайһылыр иң төпкөл райондарының береһендә 14 йәшлек ҡыҙҙы малға һатып ебәргәндәр, тигән хәбәр йәш ҡыҙҙы тулҡыландырып ҡына ҡалмай, аптырата ла. Ҡыҙҙарҙы һатмаҫҡа мөмкин булыуы! Совет хөкүмәте быңдай эште тыя икән![Биишева, 1973, 26]. Һәм йәш ҡыҙ ошо тәьҫирҙән әҫәрләнеп яҙған беренсе шиғыры техникумдың “Йәш быуын” исемле ҡулъяҙма журналында тулыһынса баҫылып сыға. “Башҡортотсан” газетаһы шул көндән башлап йәш ҡыҙҙың иң яҡын дуҫына, айырылмаҫ серҙәшенә, етәксеһенә әйләнә. Йылдар үткәс, бигерәк тә ауыр Ватан һуғышы йылдарында, әҙәби хеҙмәткәр, һуңынан яҙыусы буларак та “Совет Башҡортотсаны” газетаһының ошо изге эшендә ихлас хеҙмәт итеүен дауам итә.

Авторҙың “Батыр яуҙа һынала” исемле очеркында яҡташы, Советтар Союзы Геройы Суфый Суфиянов тураһында бәйән ителә. Тәүге осрашыуҙан һуң геройҙың портретын бына нисек тасуирлай: “Бына минең алдымда урта буйлы, балаға хас бер ҡатлы яҡты, хатта бер тиклем оялсан ҡарашлы, һылыу йөҙлө, аҙ һүҙле, үтә баҫалҡы хәрби кеше баҫып тора. Минең ентекле һорауҙарыма ябай һәм ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына яуап бирә. Мин артыҡ төпсөнә йәки уның батырлыҡтарына һоҡлана башлаһам, хатта уңайһыҙланып, ҡыҙарынып китә:

– Беҙҙең бөтә һалдаттар ҙа шулай батыр һуғышты, апай, – тип тыйнаҡ ҡына иҫкәтреп ҡуя. – Шулай булмаһа, беҙ еңә алыр инекме ни?! – ти [Биишева, 1973, 29].

Һуғышта булыуына ҡарамаҫтан, геройының кешелек сифаттарын юғалтмайынса, тыйнаҡ, сабыр, баҫалҡы холҡон һаҡлап ҡалыуы авторҙы, берҙән, һоҡландырһа, икенсенән, уның ҡаһарманлығын уйлап: “Бәхетле, осраҡлы шарттарҙың ыңғай тура килеп тороуымы, әллә ир-егеттең тәбиғи характерынан килеп сыҡҡанмы был батырлыҡ” тигән һорауға яуап эҙләй ул. Суфый Суфиянов Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында, ябай һалдаттан гвария капитаны дәрәжәһенә етә, ҡурҡыу, сигенеү белмәҫ, йәш командир үҙенең уҡсылар ротаһы менән һәр саҡ, һәр ерҙә ҡаҡшамаҫ ҡая булып дошман юлын быуырға, үҙенән күп тапҡыр күберәк көс менән һөжүмгә күскән дошманды тар-мар итергә һәләтле булыуы менән таныла.

Командование Суфияновтың ротаһына ҙур ышаныс белдерә, иң яуаплы бурыстар йөкмәтә. Егет Воронеж, Сталинград, Украина, Белоруссия фронттарында күрһәткән батырлыҡтары өсөн күп тапҡыр ордендар һәм миҙалдар менән наградлана.

Арыу, талыу, тоғролоҡ, аяныу белмәҫ йөрәге халыҡҡа хеҙмәт итеү теләге менән тулы Суфиянов һуғыштан һуң да колхозда иң һыҙғанып эшләй. Хеҙмәт фронтында ла алған Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены шул хаҡта һөйләй.

З. Биишеваның күп яҙмалары әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре хаҡында: М.Горький, Һ.Дәүләтшина, М.Йәлил, Ә.Шайморатова, Р.Хажиева һәм башҡалар.

М.Горькийға арнап яҙылған “Остазыбыҙ” очеркында иһә уның шәхси уйланыуҙары күҙаллана. Бөйөк яҙыусыға һоҡланып, оло ихтирам менән рус әҙәбиәтендә генә түгел, башҡа милләт халыҡтары әҙәбиәттәрендә лә тотҡан ролен юғары баһалай. Бында тәрән мәғәнәле һүҙҙәр бар: “Рус әҙәбиәтенең иҫ киткес вәкилдәре – бөйөк гуманистары А.С.Пушкин, Л.Н.Толстой, И.С.Тургенев, Ф.М.Достоевскийҙар беҙгә халыҡҡа оло хеҙмәт, тәрән хөрмәт менән ҡарарға, халыҡ ҡайғыһы менән ҡайғыланып, шатлығы менән шатланып йәшәргә өйрәтте, халыҡтың ауыр тормошон, яҡты рухын иң ғали юғарылыҡҡа күтәреп данларға өндәне, уның уйын, теләген, ынтылыштарын бөтә тәрәнлегендә яҡтыртыу – яҙыусының иң изге бурысы икәнен төшөндөрҙө… Ә А.М.Горький әҫәрҙәре беҙҙе иҙелгәндәр, кәмһетелгәндәр тормошон бөтә ҡатмарлылығы, ауырлығы һәм ғалилығы менән яҡтыртырға ғына түгел, ә иҙелгәндәр бәхете өсөн көрәшергә һәм еңергә өйрәтте” [Биишева, 1973, 38].

Авторҙың “Ҡурайҙан – опораға” тигән очеркы күренекле композитор Заһир Исмәғилевкә арналған. Әҫәр 1937 йылда Мәскәү консерваторияһының бер залында башҡорт бүлегенә уҡыусылар ҡабул итеү имтиханынан башлана. Ҡурай тотоп килгән башҡорт егетенең бер ниндәй ҙә музыкаль белеме булмайынса, комиссия ағзалары алдында башҡорт халыҡ классик көйө “Урал”ды уйнауы хайран ҡалдыра. Һәм ошо уйнау буласаҡ композиторҙың артабанғы яҙмышын хәл итә. З. Исмәғилев уҡытыусыларының ышанысын аҡлау өсөн бөтә көсөн, тырышлығын, талантын һала. Консерваторияның башҡорт бүлеген тамамлап ул артабан П. И. Чайковский исемендәге консерваторияла бөйөк рус классикаһын һәм рус совет композиторҙарының әҫәрҙәрен, үҙ халҡының йыр, музыка өлкәһендәге байлығын ныҡлап өйрәнеп, үҙе лә идея, художество яғынан юғары художестволы әҫәрҙәр ижад итә башлай. Ошо осорҙа уның бихисап йырҙары, увертюралары яҙыла һәм халыҡтың үҙ йыры, үҙ моңо булып, халыҡлашып китә. З. Исмәғилев консерваторияны “Салауат Юлаев” операһы менән уңышлы тамамлай.

Артабан, автор З. Исмәғилевтең “Салауат Юлаев” операһы тураһында һүҙ йөрөтөп, “был ысын музыка, ҙур талант, илһам менән яҙылған” тип юғары баһалай. Композитор был операны нисек яҙыуы тураһында һөйләгән һүҙҙәрен дә миҫалға килтереүе очерктың йөкмәткеһен байытып ебәрә: ”Мин бөгөнгө был уңышымда иң элек үҙемде тәрбиәләгән, кеше иткән Партияма, хөрмәтле остазым – бөйөк рус халҡына бурыслымын. Миңә был операны яҙыуҙа консультант булараҡ һәр ваҡыт ярҙам итеп торған уҡытыусыларым – профессор В. Г. Фере, профессор А. Н. Александров, СССР-ҙың халыҡ артисы С.Н.Василенко һәм башҡаларға бөтә йөрәгемдән рәхмәт әйтәм. Операмды бөйөк рус халҡы менән башҡорт халҡы араһында быуаттар буйына һуҙылып килгән ҡаҡшамаҫ дуҫлыҡҡа, халыҡтар дуҫлығына арнайым”[Биишева, 1973, 82-83].

Башҡорт опера сәнғәтенең формалашыу юлдарын күҙ алдына баҫтыра. Был юлды ул ҡанатлы бер ауаз: “Ҡурайҙан – операға” тигән һүҙҙәрҙә һыйҙыра алған. “Октябрь революцияһына саҡлы моңло ҡурайынан башҡа бер нәмәһе лә булмаған башҡорт халҡының хәҙер үҙ композиторҙары, үҙ операһы, үҙ театры бар. Башҡорт совет музыкаһы ҡурайҙан операға тиклем үҫте” һәм киләсәктә З. Исмәғилевтең күренекле композитор, ҙур абруйлы дәүләт эшмәкәре, сәнғәт институтының ректоры булып китеүен ғорурланып яҙа әҙибә [Биишева, 1973, 82].

Шулай итеп, Зәйнәб Биишева публицистика өлкәһендә шаҡтай әүҙем эшләгән һәм шаҡтай ярайһы уҡ ҡыҙыҡлы мираҫ ҡалдырған әҙибәләрҙең береһе. Был публицистик яҙмаларҙа уның шәхси тормошо һәм ижадына бәйле мәсьәләләр ҙә, замандаш образы, илдә барған ваҡиғалар ҙа киң сағылыш тапҡан. Һәр мәҡәләлә, һәр очеркта, һүрәтләнгән картина һәм ситуацияларҙа тәрән фекер ята. Ләкин яҙыусыны тулҡынландырған, тынғылыҡ бирмә-

йенсә борсоған социаль, мораль-этик, философик мәсьәләләр, ҡоро аҡыл һатыу рәүешендә бирелмәйенсә, һүрәтләнгән герой, хәл-ваҡиға, күренештәрҙең тел төбө, образлы айышы, шуларҙың лгик һығымтаһы рәүешендә килеп сыға. Уларҙың һәр ҡайһыһында йөрәк аша үткән аҡыл, кисерелгән фекер ята. Шуға ла тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән был яҙмалар тулҡынландыра, күңелде, зиһенде арбай.

Киләсәктә лә ошо мираҫты тулыһынса баһалап, ентекләберәк өйрәнеп уҡыусыларға еткерергә кәрәк. Сөнки авторҙың хаттары, көндәлектәре, иҫтәлектәре лә бихисап.

Милли әҙәбиәттә үҙенә генә хас тауышы, үҙ стиле, әйтер һүҙе булған, халыҡ рухын тойоп, ил тарихы менән бергә йәшәгән талантлы әҙибә ғәйәт бай һәм күп яҡлы ижады менән үҙенә рухи һәйкәл ҡуйҙы.

### Әҙәбиәт

Зәйнәб Биишева. Үткәндәргә бер әйләнеп. Очерктар, публицистик мәҡәләләр һәм иҫтәлектәр. Өфө: Баш. кит. нәшр., 1973. 107 б.

**F. B. Yunusova**

*Order of the Badge of Honour Institute of History,*
*Language and Literature UFRC Russian Academy of Sciences*
*October Avenue, 71, Ufa, 450054, Russia*
*E-mail: firdaus23@bk.ru*

## JOURNALISTIC ACTIVITY OF Z. BIISHEVA

This article briefly analyzes the essays, journalistic articles and memoirs of the famous Bashkir writer, poetess and playwright Zainab Bisheva, who made a significant contribution to Bashkir literature and dramaturgy. These works of the author were written in different years and reflect important life situations of their time and the image of a contemporary.

*Keywords:* Bashkir literature, genre, journalism, Zainab Biisheva.

### References

Zainab Bisheva. Going back to the past. Essays, journalistic articles and memoirs. Ufa, 1973. 107 p.